# Хоҙайҙы саҡырабыҙ...

Ҡайғы килһә, саҡырабыҙ Хоҙайҙы,
Теләктәрҙе беҙҙең, ҡабул итһен тип.
Араҡы эсһәк тә иҫкә алабыҙ Уны,
Һаулыҡ һорайбыҙ, уйламайбыҙ оят тип.

Шатлыҡҡа күмелһә беҙҙең тормош,
Ниңәлер беҙ Уны, бик тиҙ онотабыҙ.
Хоҙайҙы саҡырып, ҡушҡанын үтәмәйсә,
Ул биргән тормошто, боҙорға тырышабыҙ.

Нисә йылдар Хоҙай Һинһеҙ йәшәнем,
Ҡастым Һинән, уҡыманым Изге Һүҙеңде.
Һине янымда берҙә күрмәҫ өсөн,
Сытырлатып, ҡыҫып йомдом күҙемде.

Һине хәтеремдән тырыштым юйырға,
Күңелдән һыҙып ташланым исемеңде.
Яҡынлатмаҫ өсөн Һине, йән-яғыма,
Өйҙөм таштар, ҡорҙом үҙ нигеҙемде.

Гонаһтарға батып, йәшәй бирҙем,
Аңламайса, Һинһеҙ йәшәү ауыр икәнен.
Өмөтһөҙлөк мине, бығау кеүек быуҙы,
Һиҙмәй ҡалдым ярты ғүмер үткәнен.

Күктәнкилде миңә Изге Ҡотолоу,
Күрҙем Хоҙайымдың көс - ҡеүәтен.
Оятҡа ҡалдым мин шул саҡ,
Күтәргән өсөн шайтандың дан – шөһрәтен.

Хоҙайҙы данлаһын ер йөҙөндәгеләр,
Раббы Һүҙен ғәмәлгә ашырыусы бәндәләр.
Бөтөн хөкөм эйәләре, түрә – башлыҡтар,
Раббы Ғайса, исемен данлаһындар.